

# Салауат Юлаев проспекты

**Тау башында балҡый бер ҡала,**
**Ул ҡала Өфө тип атала,**
**Яҡтыраҡ яна йондоҙҙары,**
**Матурҙар егет һәм ҡыҙҙары...**

Өфөм — баш ҡалам. Гүзәл ҡалам. Көндән-көн үҫә, матурая, ҙурая ул. Өр-яңы йорттар ҡалҡып күтәрелә, яңы урамдар барлыҡҡа килә. Бына бөтәбеҙ ҙә көтөп алған, яратып өлгөргән Салауат Юлаев проспектына ла бер йәш булып килә. Яңы тыуған бәпес төҫлө, ай үҫәһен көн үҫеп тигәндәй, матурайғандан матурая бара ул. Проспект буйлап көнөн дә, төнөн дә машиналар ағыла. Дөрөҫөрәге, бында көн менән төн артыҡ айырылмай: Салауат Юлаев проспектының ике яғына сафҡа баҫҡан һалдаттар төҫлө торған бағаналарҙағы электр уттары төндәрҙе лә көндөҙгөләй яҡты итә. Әгәр элек Өфө халҡы ҡаланың төньяғынан аэропорт йүнәлешенә сығыу өсөн сәғәтләп ваҡыт сарыф итһә, хәҙер 10-15 минут та етә. Дөрөҫ, әлегә автомагистралде ике яҡлап биҙәп торған биналар аҙ. Әммә был ваҡыт — йылдар сылбырына бәйле. Күр

ҙә тор, бер заман ил батыры исемен йөрөткән проспект сит ил ҡунаҡтарына ғорурланып күрһәтеп йөрөрлөк урамға әйләнер.

Өфө ҡалаһы хакимиәтенең баш архитектура идаралығы етәксеһе урынбаҫары, Башҡортостандың атҡаҙанған архитекторы **Динар Дитар улы Хәлитов** беҙҙе Салауат Юлаев проспектының үҫеш баҫҡыстары менән таныштырҙы:

— Белеүегеҙсә, Салауат Юлаев проспекты 2004 йылда сафҡа инде. Ул Өфөлә әлегәсә булмаған өр-яңы типтағы урам. Автомобилдәр өҙлөкһөҙ хәрәкәт итә алған магистраль ул. Унда урамдар киҫешкән урындар бөтәһе лә ике кимәлдә эшләнгән, йәғни төп юл — проспект аҫта, ә уны киҫеп үткән юлдар өсөн күперҙәр төҙөлгән. Бер кем бер кемгә ҡамасауламай. Проспект буйынса бер генә светофор ҙа юҡ, машиналар һис туҡтамайынса елә ала. Киләсәктә проспект аша йәйәү йөрөү өсөн дә махсус юлдар төҙөлөү ҡаралған.

Проекттың авторҙары — Г.А. Чиглинцева етәкселегендәге архитекторҙар төркөмө. Әйткәндәй, уларҙың бер-нисә проекты төрлө бәйгеләрҙә урындар яулаған. Уҙған йыл, мәҫәлән, иң яҡшы планлаштырыу эштәре араһында барған конкурста был архитекторҙар лауреат исеменә лайыҡ булған.

Әлбиттә, әле автомагистралдең тирә-яғы төҙөкләнеп бөтмәгән. Был киләсәк эше. Бер урам да ҡапыл ғына төҙөлмәй. Мәҫәлән, Октябрь проспектын алайыҡ. Уның барлыҡҡа килеүенә күпме йылдар үткән, ә төҙөлөш эштәре әле лә бара, ул айҙан-айға, йылдан-йылға үҙгәрә.

Салауат Юлаев проспекты ла киләсәктә бик күркәм булмаҡсы. Проектта ҡаралғанса, унда ижтимағи-эшлекле йүнәлештәге объекттар күп урын аласаҡ. Баш ҡалабыҙҙың тарихын һынландырған Фрунзе, Коммунистик, Яңы Күпер һәм башҡа урамдарға боролоштар этнографик һәм мәҙәни үҙәк талаптарына ярашлы буласаҡ. Проспекттың ике яғында күңелдәргә ятышлы проект менән төҙөлгән, республикабыҙҙың асылын сағылдырып биҙәлгән ҙур магазиндар ҡалҡып сығасаҡ. Киләсәктә магистраль тирәһендә аэровокзал, үҙәк автовокзал төҙөү ҙә күҙаллана. Әммә былар барыһы ла айҙар, йылдар буйы дауам итә торған эштәр.

Баш ҡалабыҙ үҫешенең генераль планында тағы бер нисә шундай магистраль төҙөү ҡаралған. Әйтәйек, шуларҙың береһе өсөн туннелдәр төҙөлә башланы ла инде. Магистраль Ҡариҙел йылғаһы буйына, Дудкино ауылы тирәһенә барып сығасаҡ һәм киләсәктә Һамар—Силәбе трассаһына барып ҡушыласаҡ. Бындай юлдарҙың төҙөлөүе ҡала эсендәге машиналар һанын кәметеүгә, экологик йәһәттән ыңғай күренешкә булышлыҡ итәсәк. Сөнки машиналар һаны йылдан-йыл арта, һауа бысрана.

Ҡыҫҡаһы, күптән көтөлгән Салауат Юлаев проспекты киләсәккә ышаныслы баға. Уның күңелдәрҙе шатландырыр, ҡунаҡтарҙы ҡыуандырыр мәлдәре алда әле. Ә хәҙер ошо проспект хаҡында үҙ фекерҙәре менән Өфө ҡалаһы вәкилдәре уртаҡлаша.

Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы милли мәғариф бүлегенең баш белгесе **Рәйсә Абдрахман ҡыҙы Күзбәкова**:

— Баш ҡалабыҙҙа Салауат Юлаев исемен йөрөткән проспект асылыуына бик ҡыуандым. Беҙ икенсе яҡтараҡ йәшәгәнлектән, ул юлдан йөрөргә тура килмәй, әммә дуҫтар, таныштар бик ҡыуанып һөйләйҙәр. Мин үҙем был проспектты баш ҡалабыҙҙың йөҙөн билдәләүсе урын булырға тейеш, тип күҙаллайым. Әле бейек тау булып ҡалҡып торған ерҙәрҙә һәр береһе үҙенә бер архитектура ҡомартҡыһы булырлыҡ, шул уҡ ваҡытта милли колоритлы мөһабәт йорттар ҡалҡып сығыр, тип өмөтләнәм. Сит илдәрҙә бит Башҡортостанды Салауат Юлаев исеме менән бәйләп күҙаллайҙар. Шулай булғас, батыр исеменә торошло, киләсәктә тағы ла матурыраҡ, күркәмерәк, һоҡланырлыҡ проспект булһын ине ул.

Башҡортостан Республикаһы Халыҡтар дуҫлығы йорто директоры, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған артисы **Шәрифулла Сәйфулла улы Алсынбаев** бына нимә ти:

— Баш ҡалабыҙҙа батырыбыҙ Салауаттың исемен йөрөткән проспект булыуы ҡыуаныслы. Ул батыр исеменә лайыҡлы булырға, республикабыҙҙың, халҡыбыҙҙың ғорурлығына әүерелергә тейеш. Шуға күрә уның биҙәлешенә айырыуса иғтибарлы булыу мөһим. Башҡорт халҡының тарихында, мәҙәниәтендә, әҙәбиәтендә сағыу эҙ ҡалдырған арҙаҡлы шәхестәр, бай ауыҙ-тел ижады, Урал батыр, Алпамыша, Йәнбикә, Йәнбирҙе һәм башҡа шундай персонаждарҙы, тарихи күренештәрҙе сағылдырған биналар, донъяла тиңе булмаған монументаль ҡомартҡы — комплекс урын алһын ине.

Проспектта ике яҡлап Башҡорт халыҡ йорто, милли ҡунаҡханалар, башҡорт ашамлыҡтары, ҡымыҙ менән һыйлаған кафе, башҡорт ижади интеллигенцияһы вәкилдәре өсөн махсус кафелар, рестарандар, мәсет, башҡортса китаптар һатылған магазиндар төҙөлһә, шәп булыр ине.

Башҡорт дәүләт университетының Хоҡуҡ институты студенты **Искәндәр Юлдашев:**

— Баш ҡалабыҙҙа Салауат Юлаев исемен йөрөткән проспект асылыуға мин дә бик ҡыуандым. Ниһайәт, күп йәһәттән уйланылған матур магистраль тыуыуы һәйбәт. Әлбиттә, был беҙҙең суверенитет емеше. Киләсәктә был юл тағы ла йәмләнер, тип уйлайым. Магистраль буйлап эсе лә, тышҡы биҙәлеше лә Салауат рухына тап килгән, киләсәктә архитектура ҡомартҡылары булырлыҡ йорттар ҡалҡып сығыр, тигән өмөттәмен. Әле беҙ килгән ҡунаҡтарҙы Салауат Юлаев һәйкәле янына, Еңеү паркына алып барабыҙ. Киләсәктә проспект эргәһендә бик күркәм берәй парк төҙөлөп, унда Зәки Вәлиди, Шәйехзада Бабич, Муса Мортазин, Миңлеғәли Шайморатов кеүек арҙаҡлы шәхестәргә һәйкәлдәр ҡалҡып сыҡһа ине. Үҙ халҡының бәхете өсөн башын һалған батырҙар данға лайыҡ, ә батырҙарын онотмаған халыҡтың киләсәге ышаныслы.

*Зөһрә АЛТЫНБАЕВА*
*әҙерләне.*